Камалова Рамиля Рашитовна
Воспитатель
Савалеевский филиал МАДОУ детский сад "Малышок" д. Улукулево

**Тема8**

Балағыҙ дуҫлаша беләме

Һаумыһығыҙ!

Һаумы! Һаумы!

Һаулашам - сәләм бирәм,

“Һаумы” тигән һәйбәт һүҙҙе

Бар донъяға ебәрәм.

Хәйерле көн, әсәйҙәр, хөрмәтле баһалау комиссияһы ағызалары!
Мин Камалова Р. Р. - Ҡырмыҫҡалы районының Һәүәләй филиалы Олокүл ауылының “Бәләкәс” балалар баҡсаһының юғары категориялы тәрбиәсеһе.
Хөрмәтле әсәйҙәр, ошо "Тылсымлы йомғаҡ" ярҙамында танышып алайыҡ. Исемегеҙҙе атағыҙ ҙа һәм исемегеҙҙең беренсе хәрефенә тура килгән сифатығыҙҙы әйтегеҙ. Рәхмәт!
Бөгөнгө һөйләшеүҙең темаһын асыҡлау өсөн һеҙгә йомаҡ әйтәм:
*Һеҙгә әйтәм йомаҡ!*
*Яуабын белһәгеҙ,*
*Тимәк, һеҙ – зирәк!*
*Шатланып йәшәр өсөн*
*Был тормошта кем кәрәк?*
Дөп-дөрөҫ, беҙгә ата-әсә, туғандарҙан тыш, дуҫтар кәрәк!
Бөгөн дуҫлыҡ тураһында һөйләшәсәкбеҙ, темабыҙ **“Балағыҙ дуҫлаша беләме?”** тип атала.
Бер-беребеҙҙе аңлау, ишетер өсөн, әйҙәгеҙ алдан ҡағиҙәләрҙе билдәләп үтәйек:

- беҙ баҡсала балалар менән һөйләшеп ҡуябыҙ -
  берәү һөйләгәндә, .... икеселәр тыңлай
- фекерҙәрҙе аңлайышлы һәм ҡыҫҡа итеҫп тема буйынса әйтәбеҙ.

Әгәр һеҙ минең менән аралашырға, һорауҙарға яуап бирергә, актив булырға әҙер булһағыҙ сәпәкәй итеп алығыҙ.

Беҙҙең бөгөн формаль булмаған һөйләшеүҙә дөрөҫ булмаған һорауҙар һәм яуаптар юҡ. Шуның өсөн иркен итеп, ҡурыҡмай ҡыҙыҡлы һөйләшеү алып барайыҡ.

Аралашыуыбыҙ традицион булмаған телевизион тапшырыу - ток-шоу формаһында барыр. Мин алып барыусы ролендә булырмын, ә һеҙ - тапшырыуға килгән ҡунаҡтар-эксперттар.
Дуҫһыҙ кеше - утһыҙ кеше
Дуҫһыҙ йәшәмәй кеше
Ҡошто көсө - ҡанатында,
Дуҫлыҡта кеше көслө.
тип яҙған С. Әлибаев бер шиғырында.
Дуҫ — ул һинең шатлығыңды уртаҡлашыусы, ҡайғыңды таратыусы, йыуатыусы, күңеленә иң яҡын кешең. Дуҫтарҙың ҡараштары тап килеүе — оло ҡыуаныс. Дуҫлыҡҡа тап төшмәһен өсөн һәр саҡ үҙ-ара яҡшы мөнәсәбәттәрҙе һаҡлай белергә кәрәк.
Ата әсәнең ҙур бурысы балаларҙы бәләкәйҙән дәҫлашырға өйрәтеү. Баланы башҡаларҙың хистәрен һәм эштәрен күрергә, аңларға, баһаларға, үҙ фекерҙәрен аңлатырға өйрәтергә кәрәк.

"Тиҫтерҙәрҙең аралашыуы үҙенән-үҙе барлыҡҡа килә, өлкәндәрҙең ҡыҫылышын талап итмәй", тип иҫәпләү, һәм "балаларҙы уйнарға өйрәтергә кәрәк түгел" тигән фекергә һеҙ нисек ҡарайһығыҙ? Әллә быңдай осраҡтарҙа ярҙам итергәме?

***..... (обсуждение)***

Әйе, былар элегерәк ҡырағай булып күренә ине. Бөгөн быны эшләргә кәрәк. Балалар бер-береһе менән аралаша белмәйҙәр. Улар, әлбиттә, бергә уйнайҙар, бер-береһенә нимәлер һөйләйҙәр, әммә бер-береһен тыңлай белмәйҙәр, һәр кем үҙе әйтергә тырыша, һирәк осраҡта икенсеһен тыңларға, уңыштарға шатланырға йәки йыуатырға тырыша.

Әлбиттә, тәүге аралашыу дәрестәрен бала өйҙә ала. Өйҙә нисек аралашыу булһа, тиңдәштәре менән дә шул стилдә аралашасаҡ. Бәләкәйҙән балағыҙҙы эргәһендәге тиңдәшен тыңларға, уңыштарына шатланырға, кәрәк саҡта йыуатырға өйрәтеү мотлаҡ.

Хөрмәтле әсәйҙәр,

- балаларығыҙҙың дуҫтары бармы?
- ҡыҙыҡһынаһығыҙмы дуҫтары тураһында?
- балағыҙҙың иң яҡшы дуҫы кем икәнен беләһегеҙме;
- балағыҙҙың дуҫтарын беләһегеҙме;
- балағыҙҙың дуҫтарын яҡлашҡан осраҡтары булғанмы;
- кис бөтә ғаилә менән көндөң нисек үтеүе тураһында фекер алышаһығыҙмы?

***..... (обсуждение)***

Балалар араһында дуҫтарса мөнәсәбәттәр булдырыу өсөн, йыш ҡына балалар менән уйнаған бер нисә уйын тәҡдим итәм.

***«Комплименты»* уйыны.**

Ҡатнашыусылар түңәрәккә баҫалар. Уң яҡтағы күршегә иғтибар менән ҡарарға һәм уның ыңғай сифаттарын әйтергә кәрәк.

Уйын «***мин һине яратам*** " тигән һүҙҙәр менән башлана. Һәр кем уң яҡтағы күршеһенә комплимент әйтә. Уйын тамамланғандан һуң ҡатнашыусылар үҙҙәре тураһында һөйләү һәм комплименттар ҡабул итеү оҡшанымы - юҡмы икәнен, нимә тойоуҙары тураһында фекер алыша.

***"Мин яратам" уйыны.***

Маҡсат: башҡаларға ҡарата иғтибар үҫтереү, үҙ хистәрен белдерә белеү. Уйынсылар түңәрәк буйлап ултырғыстарҙа ултыра. Алып барыусынан башлап, уйынсылар сиратлап яратҡан нәмәләре менән таныштыра. Мәҫәлән: "Минең Исемем Галина. Мин сәйәхәт итергә яратам һ. б.

***"Компот" уйыны***

Ҡатнашыусылар түңәрәктә урынлаша. Уларҙың бурысы - ниндәйҙер "компот" әҙерләү. Быны түбәндәгесә эшләргә мөмкин: беренсе ҡатнашыусы исемендә булған берәй хәреф менән емеш (йәки ул "коллектив компот" ҡа һалған еләк) атай, (йәки фамилия, мәҫәлән, Ира - ирга, Гена - груша, Лена - лимон һ. б.) Һәр ҡатнашыусы башта "компот" ҡа унан алдағылар нимә һалғандарын әйтергә, ә һуңынан үҙ исемен һәм ул һалырға йыйынған емеш-еләкте (Йәки еләкте) әйтергә тейеш.

*/мәҫәлән: "Сергей ҡарағат, Аня - абрикос, Кирилл - калина, Илья - изюм, минең исемем Антон һәм мин "компот" ҡа алычу һаласаҡмын./*

**«Эйе-эйе, юҡ-юҡ-юҡ» уйыны:**

Һорауҙар бирелә, хор менән яуап бирергә кәрәк.
Көслө ҡулдар һуғышҡа ташланамы? (Юҡ)
Яҡшы ҡулдар этте яратамы? (Эйе)
Аҡыллы ҡулдар уйнай беләме? (Эйе)
Изге ҡулдар рәнйетерме? (Юҡ)
Ҡәҙерле ҡулдар дауалай беләме? (Эйе)
Көслө ҡулдар бергә эшләрме? (Эйе)
беҙ ныҡлы дуҫ булырбыҙмы? (Эйе)

**Йомғаҡты тапшырам, һәм уның исемен һөйкөмлө итеп әйтәм ...**

*(Йомғақтың исемен һөйкөмлө итеп әйтәлә, күршеһенә тапшыра.
Мәҫәлән, йомғаҡкайым, йоморокайым һ.б.)*

"Дуҫ — дуҫтың көҙгөһө" ти халыҡ мәҡәле.
Балаларҙы дуҫлашырға, дуҫ булып йәшәргә өйрәтәйек.

Ҡаплармын ел-бурандарҙан,
Бәләнән араламмын…
Үҙең һаҡла, Хоҙайкайым,
Һау булһын балаларым!

тип яҙа Фирүзә Абдуллина "Һау булһын балаларым…" шиғырында.
Балаларыбыҙҙы һаҡлайыҡ, уларҙың матур киләсәге өсөн бөгөнгө көндө ҡулдан ысҡындырмайәк.
Балаларыбыҙ - беҙҙең киләсәгебеҙ!
Рәхмәт!

*(Памяткалар, бүләк биреү)*